**Башҡорт теле дәресенән технологик карта**

| | |
|---|---|
| **Класс:** | 6 |
| **Дата:** | |
| **Дәрес темаһы:** | Дуҫлыҡ. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. |
| **Дәрес төрө:** | Яңы материалды өйрәнеү. |
| **Дәрес маҡсаттары:** | **Белем биреү:** тема буйынса яңы һүҙҙәр, күнегеүҙәр аша дуҫлыҡ темаһын яҡтыртыу, алмаштарҙы ҡабатлау.<br>**Үҫтереүсе:** һөйләү телмәрен үҫтереү, һүҙлек байлығын арттырыу.<br>**Тәрбиәүи:** уҡыусылар араһында яҡшы мөнәсәбәт, дуҫлыҡ хисе тәрбиәләү. |
| **Көтөлгән һөҙөмтәләр:** | Предмет УУЭ һөҙөмтәләре: тема буйынса яңы һүҙҙәр өйрәнеү, телмәрҙә ҡулланыу.<br>Метапредмет (предмет-ара) УУЭ һөҙөмтәләре:<br><u>а) регулятив:</u> уҡытыусы менән берлектә дәрес темаһын, маҡсатын билдәләргә күнегеү, булған белемдәрен барлау, баһалау;<br><u>б) танып-белеү</u>: кәрәкле мәғлүмәтте айыра, күрһәтә, дөйөмләштерә белеү;<br><u>в) коммуникатив:</u> темаға ҡарата бәйләнешле текст төҙөй белеү, парлап диалог ҡороу, үҙ-ара аралаша, төркөмдә хеҙмәттәшлек итә, тормошта ҡуллана белеү.<br>Шәхси УУЭ һөҙөмтәләре: иптәштәрен, уҡытыусыларҙы ихтирам итеүсе, тырыш, әҙәпле, белем алыуға ынтылыусы шәхес тәрбиәләү. |
| **Йыһаҙландырыу:** | Компьютер, проектор, “Башҡорт теле” дәреслеге, “Дуҫлыҡ” темаһына презентация, һүҙлектәр, таратма материал, йылмайлиroutine. |

| **Дәрес этаптары** | **Уҡытыусы эшмәкәрлеге** | **Уҡыусылар эшмәкәрлеге** | **Дәрестең һәр этабында формалаштырылған УУЭ (регулятив, танып белеү, коммуникатив, шәхес булараҡ формалаштырыу)** |
|---|---|---|---|
| **I.** Уҡыу эшмәкәрлегенә мотивация булдырыу. | 1. – Һаумыһығыҙ! Хәйерле иртә!<br>-Хәйерле көн теләп, ҡояш ҡалҡа,<br>Уяналар ауыл, ҡалалар.<br>Үҙ телемдә һеҙҙе сәләмләйем;<br>Хәйерле көн һеҙгә, балалар!<br>- һеҙҙе күреүемә бик шатмын. Таныш булайыҡ, минең исемем Гөлдәр Нурулла ҡыҙы. Башҡорт теле дәресен башлайбыҙмы?<br>2. Артикуляцион күнегеү. (слайд1)<br>Һаумы, бөгөнгө иртә,<br>Һаумы, ҡышҡы тәбиғәт,<br>Һаумыһығыҙ, уҡытыусым,<br>Һаумыһығыҙ, дуҫтарым,<br>Һаумыһығыҙ, ҡунаҡтар! | Уҡытыусы менән башҡорт телендә һаулашалар.<br><br>Уҡыусылар яуап бирә. Хор менән ҡабатлайҙар. | Р.: үҙҙәренең уҡыу эшмәкәрлеген ойоштора белеү, яҡшы, продуктив эшкә ынтылыш формалаша.<br><br>Т.б. : яңы белем алыу кәрәклеген аңларға өйрәнәләр.<br><br>Ш.: белем алыуға, уҡыуға ҡарата ыңғай ҡараш формалаша. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| **II.** Уҡыу мәсьәләһен ҡуйыу. | 1. Уҡыусылар, хәҙерге дәрестең темаһын билдәләр өсөн кроссворд сисеп алайыҡ. (слайд 2)<br><br>Вертикаль буйынса һорауҙар.<br><br>1.Ике кешенең һөйләшеүе нисек атала?<br><br>2.Башҡорт халҡының милли музыка ҡоралы.<br><br>3.Ҡурай нимә ул?<br><br>4. Ул 3 төҫтә: зәңгәр, аҡ, йәшел.<br><br>5. Салауат Юлаев кем ул?<br><br>6.Миҙгел.<br><br>- Горизонталь буйынса нимә килеп сыҡты?<br>-Афариндар! Дөрөҫ!<br>-Тимәк, беҙ бөгөн дәрестә нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ?<br>-Эйе, дуҫлыҡ тураһында һөйләшербеҙ. | Кроссворд сисәләр, һорауҙарға яуап эҙләйҙәр, һүҙлектәр менән эшләйҙәр.<br><br>Уҡытыусының һорауҙарына яуап бирәләр.<br><br>Дәрестә нимә тураһында һөйләшеүҙәре тураһында әйтәләр. | Ш.: укыу эшмәкәрлегенә мотивация, уҡыуға, яңылыҡ белеүгә ынтылыш, ҡыҙыҡһыныусанлыҡ формалаша.<br><br>Р.: уҡытыусы менән берлектә дәрестең маҡсатын билдәләргә өйрәнәләр.<br><br>Т.б.: логик фекер йөрөтөү, уҡыу мәсьәләһен табыу, күрһәтә белеү формалаша. |
| **III.** Яңы материалды өйрәнеү. Уҡыу мәсьәләһен сисеү. | 1. Дуҫлыҡ тураһында әңгәмә. (слайд 4-6)<br>2. Яңы һүҙҙәр менән танышыу. Һүҙлек эше.(слайд 7)<br>Дуҫ-друг, дуҫлыҡ-дружба, ысын дуҫ-настоящий друг, тоғро-верный, ышанысլы-надежный, ғәҙел-справедливый, ҡыйыу-храбрый.<br>3. Һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр төҙөү.<br><br>4. Диалог төҙөү.(слайд 8)<br>-Уҡыусылар, ә хәҙер парлашып дуҫлыҡ тураһында диалог төҙөгөҙ.<br>- Һинең дуҫың бармы?<br>-Эйе, минең дуҫым бар.<br>-Уның исеме нисек?<br>-Уның исеме .....<br>-Уға нисә йәш?<br>-Уға ...йәш. | Һорауҙарға яуап бирәләр.<br>Эш дәфтәрендә эшләйҙәр.<br>Яңы һүҙҙәрҙе хор менән ҡабатлайҙар.<br><br>Яңы һүҙҙәр менән һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр төҙөйҙәр.<br>Өлгө буйынса диалог төҙөйҙәр.<br>Парлап диалог төҙөйҙәр, диалогты уҡыйҙар. | К.: диалогка инергә, һорауҙарға яуап бирергә, башҡаларҙы тыңлай һәм әңгәмәгә ҡушыла белергә, һөйләмдәр төҙөргә өйрәнәләр.<br><br>Т.б.: яңылык белеүгә ынтылыш формалаша. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | - Ул нисәнсе класта уҡый?<br>- ... ... класта уҡый. | | |
| **IV.** Ял минуты. | Сәләмләйбеҙ һауаны, (слайд 9)<br><br>Именлек булһын өсөн!<br><br>Сәләмләйбеҙ дуҫтарҙы,<br><br>Дуҫлыҡ ныҡ булһын өсөн! | Уҡытыусы артынан хор менән эшләп ҡабатлайҙар. | Ш. : уйында ҡатнашыу мәҙәниәте фомалаша, уҡыу материалына ҡыҙыҡһыныу арта. |
| **V.** Белемде нығытыу. (практикала ҡулланыу). | 1. Дәреслек менән эш. 4-се күнегеү,48-се биттәге күнегеүҙе башҡарыу (нөктәләр урынына тейешле һүҙҙәр өҫтәп, тексты күсереп яҙырға)<br>-Уҡыусылар, был күнегеүҙә минең, ул, уға һүҙҙәре осораны. Улар ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарайҙар?<br>- Афарин, дөрөҫ, алмаштар.<br><br><br><br>2.Мәҡәлдәрҙе рус телендәге мәҡәлдәрҙән парын табалар. (слайд 10)<br>Яуап: 1-4, 2-3, 3-5, 4-2, 5-1.<br><br>3. Дуҫлыҡ тураһында синквейн төҙөү.(слайд 11-12) | Үҙ аллы күнегеүҙе башҡаралар, нөктәләр урынына тейешле һүҙҙәр өҫтәп күсереп яҙалар, тәржемә итәләр.<br><br>Һорауҙарға яуап бирәләр, алмаштарҙы табалар.<br><br><br><br><br>Мәҡәлдәрҙең парҙарын табалар, рус телендәге эквивалентын эҙләйҙәр.<br><br>Синквейн төҙөйҙәр. | Р.: уҡыу мәсьәләһен аңлау, кабул итеү, үҙҙәренең эшмәкәрлеген планлаштырыу, үҙ аллы эшләргә өйрәнеү формалаша.<br>К. : һорауҙарға яуап бирергә, башҡаларҙы тыңларға, һөйләмдәр төҙөргә, әңгәмәгә ҡушылырға, үҙҙәренең фекерҙәрен әйтергә өйрәнәләр.<br>Т.б.: мәҡәлдәрҙең парын таба белеү, рус телендәге мәҡәлдәр менән сағыштыра, һығымта яһай, үҙҙәренең эштәрен баһалай белеү формалаша. |
| **VI.** Өйгә эш. | 1.Яңы һүҙҙәрҙе ятларға. (слайд 13)<br>2. Дуҫлыҡ тураһында мәҡәлдәр яҙырға.<br>3. “Минең дуҫым” темаһына һүрәт төшөрөргә. | Көндәлеккә өйгә эште яҙалар. | |
| **VII.** Дәресте йомғаҡлау. | - Шулай итеп бөгөн дәрестә нимә белдегеҙ? (слайд 14)<br>- Нимәгә өйрәндегеҙ?<br>- Һөйләмдәрҙе тултырып әйтегеҙ.<br>*Дәрестә мин ... белдем.*<br>*Мин ... өйрәндем.*<br>*Миңә ... оҡшаны (оҡшаманы).*<br><br>Уҡытыусы баһаһы. | Уҡыусыларҙың яуаптары. Нимәгә өйрәнеүҙәре тураһында әйтәләр.<br>- Уҡыусылар үҙҙәренең эштәрен баһалай. | Р.: үҙҙәренең эшмәкәрлегенә баһа бирә белеү, уҡытыусының баһаһына адекват ҡараш формалаша.<br>Ш.: үҙүҫеш, баһалау күнекмәһе үҫешә. |